*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ*

# Бал ҡорто мөғжизәһе

Башҡорттар бик боронғо замандарҙа уҡ ағас ҡыуыштарынан бал алыу, солоҡ соҡоп эшләп, бал ҡорттары аҫрау менән шөғөлләнгән, шифалы кәрәҙле бал менән туҡланған. Солоҡсолоҡ ҡанбабаларҙың ғәҙәти шөғөлө булған. Һәр хужа солоғона үҙ тамғаһын ҡуйған. Урмандарҙы ҡырҡыуҙың көсәйеүе, ер эшкәртеүҙең киңәйеүе, тәбиғи мөхиттең үҙгәреүе һөҙөмтәһендә Көньяҡ Урал тәбиғәте торошона яраҡлашҡан ҡырағай бал ҡорттары юғала, солоҡ түмәр умарта, рамлы умарта менән алмашына, ҡортсолоҡ хужалыҡ тармағы рәүешле үҫеш ала. Хәҙерге ваҡытта солоҡ ҡорто Бөрйән төйәгендә, Шүлгәнташ ҡурсаулығында һаҡланып ҡалған.

Башҡорт иленең хайуандар, үҫемлектәр донъяһын өйрәнеүсе XVIII быуат тарихсыһы Петр Рычков: ”...Бал ҡорто шөғөлө йәһәтенән башҡорттарҙы уҙып киткән берәй халыҡ бармы икән?” — тип яҙған. Башҡорт балының даны бөтә донъяға таралған. Әйткәндәй, XX быуаттың алтмышынсы йылдарында Башҡортостан ауыл хужалығының йәмәғәт һәм шәхси тармаҡтарында 400—440 мең күс булған. Алдынғы умартасылар уңай килгән йылдарҙа һәр оянан етмеш—йөҙ килограмм бал алған. Йәмәғәт умартасылыҡтарында йыл һайын уртаса 1,5—2 мең тонна, 1957 йылда иһә 3 мең тонна тауар балы йыйылған. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, илдә иҡтисади хәлдең үҙгәреүе, экологик хәлдең киҫкенләшеүе, йүнселлектең етмәүе арҡаһында республикабыҙҙа күстәр һаны, бал етештереү ныҡ ҡына кәмене. 2005 йылда Башҡортостанда бөтәһе 278 меңдән ашыу күс-оя булыу ихтималлығы күҙаллана. Шуны әйтергә кәрәк, Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге ҡарамағында биш меңдән ашыу күс иҫәпләнә, 2500 оя бөрйән ҡорто инәле. 2005 йылда 30 тонна бал алынған. Халыҡ әйтмешләй, әлбиттә, ”бал, бал” тиеү менән генә ауыҙ тәмләнмәй, бал ҡортоноң балы бар, балға тиклем наҙы бар. Ҡортсолоҡтоң киләсәге хаҡында ҡайғыртырға бурыслы ҡәрҙәштәр ошо наҙҙан баҙап ҡалмаҫҡа тейеш. Сөнки умартасылыҡ ризыҡтарына ихтыяж ҙур. Башҡорт балы Америка, Франция, Италия, Германия, Япония кеүек сит илдәрҙә лә данлы.

Бал ҡортоноң һәр ниғмәте лә шифалы. Бәлки, шуға ла халҡым умартасылыҡ шөғөлөн яҡын күргәндер, үҙ иткәндер. Боронғо ғәрәп табибы һәм философы Ибн Сина ”Табиплыҡ ҡануны ғилеме”ндә яҙыуынса, ҡанатлы эшһөйәрҙәр ете шифалы мөғжизә тыуҙыра: бал, балауыҙ, һеркә, ҡорт ағыуы (апитоксин), инә ҡорт һөтө, прополис һәм бал ҡорто торағының хуш еҫе. Ғөмүмән, бөтә дәүерҙәрҙең табиптары һәм философтары тәбиғәттең ошо ғәжәп мөғжизәһе тәндең һәм йәндең сәләмәтлеге өсөн нигеҙ булыуын раҫлай. Рим шағиры Овидий яҙғанса, күп аҡыллы аллалар-

ҙан һәм аҡыллы тәбиғәт рухтарынан бүләк — бал һәм прополис...

Дини яҙмаларҙа әйтелеүенсә, донъя бал ҡорттары эшләгәнсе һәм йәшәгәнсе йәшәй. Улар — изге йәндәр, умартасылыҡ — изге урын. Ҡөрьәндә умарта ҡорттары сүрәһе булыуы ла быны раҫлай: ”Раббың бал ҡорттарына вәхи ҡылды: ”Эй, бал ҡорттары, тауҙарҙа, ағастарҙа вә кешеләр торған яйҙарҙа үҙегеҙгә оя яһағыҙ! Һәр емеш сәсәктәренән бал ашағыҙ һәм йыйығыҙ вә итәғәт итеп, мин әмер ҡылған юлға кәрегеҙ!” Бал ҡорттары кешеләр өсөн төрлө төҫтәге балдарҙы сығарып бирә, ул балдарҙа ашар өсөн тәме лә, кешеләр өсөн шифаһы ла бар. Фекерләй белгән кешеләр өсөн бал ҡорттарының эшендә ҙур ғибрәт вә дөрөҫлөк барҙыр. Йәғни, бал ҡорттарына һис кем дәрес бирә алмаҫ, ләкин кешеләр бал ҡорттарынан дәрес ала”. Бал ҡорттарының умартала рамлы баллы кәрәҙҙә ”Аллаһ” тигән яҙыу хасил итеүҙәре — үҙе бер мөғжизә. Эйе, бал ҡорттары донъяһы — бик тә үҙенсәлекле донъя, хайран итерлек һәм фәһем алырлыҡ донъя! Нәҫеле, сығышы, тәбиғәте менән солоҡсо, умартасы булғандар — бал ҡорттары тормошо серҙәрен һәм нескәлектәрен яҡшы белгән эшһөйәр, ҡотло, ырыҫлы кешеләр.

Минең атайым да ғүмере буйы ҡорт ҡараны. Күмәк хужалыҡ умартасылығында эшләне, йортобоҙҙағы баҡсала ла умарта тотто. Совет заманында оялар иҫәбен сикләүҙәргә, ишәйтеүҙе тыйыуҙарға ҡарамаҫтан, яратҡан шөғөлөнән һис кенә лә төңөлмәне, яҙын ояларҙы таҙартыу, ҡорт айырыу, бал килеме мәлдәрендә бөтмәҫ-төкәнмәҫ мәшәҡәттәрҙән, көн буйы йүгереүҙән арыһа-талһа ла, аяҡ табандары ярылып килһә лә, ғүмеренең аҙағына тиклем йән-рухына шифа биргән йән эйәләренән айырылманы. Оялар араһында күҙелдерек кеймәй йөрөгәнен күреп, ғәжәп ҡылып, ауылдаштарым: ”Миңлеәхмәтте ҡорттары таный, саҡмай”, — ти торғайны. Шуны ла белдем: бик һәләтле булһа ла, атайыма уҡырға форсат теймәй, дүрт синыф белемде ике йылда үҙләштереп, һуңынан умартасылыҡ курстарын бик яҡшыға тамамлай һәм ҡортсолоҡ шөғөлөнән ғәм һәм йәм таба.

Мин дә бәләкәйҙән үк бал ҡорттары тормошо менән яҡындан танышып үҫтем, умартасылыҡ серҙәренә төшөнөргә тырыштым, атайыма ярҙамлаштым: умарта таҙартыштым, күс һоҙҙом һәм ябыштым, бал айырҙым, прополис йыйҙым, рамдарға балауыҙ йәбештерҙем, Шыбаҡ урманынан сөрөк килтерҙем, ниндәй үҫемлектәр, сәскәләр бал биргәнен, ҡорттар ни рәүешле бал ташығанын белдем... Умартасы булманым, мәгәр ҡортсолоҡ донъяһы менән гелән ҡыҙыҡһындым. Бала саҡта ни өсөн әбейҙәр атайымдан кәрәҙле бал һорайҙар икән, тип уйлай торғайным. Өҫтәүенә, ул мансалы ла. Айыртылған бал һәйбәтерәктер бит?.. Баҡһаң, бының үҙ ғилләһе бар икән. Ғалимдарҙың раҫлауынса, тәбиғи кәрәҙ фәҡәт балауыҙҙан ғына түгел, ә һеркәнән, һитәнән һәм ун процентҡа тиклем прополистан да тора. Тәбиғи кәрәҙҙе нығытыу өсөн бал ҡорттары һары балауыҙға ҡара балауыҙ, йәғни прополис ҡуша, күҙәнәктәрҙең эске яғын йоҡа ғына елем менән ҡаплай, кәрәҙҙе ояның өҫкө өлөшөнә, стенаһына прополис менән йәбештерә. Инә ҡорт күкәй һалған, бала яҫҡылығы булған күҙәнәктәр ошо антибиотик сифатындағы матдә менән зарарһыҙландырыла. Кәрәҙле, һитәле (мансалы) балдың дауа өсөн сихәте һәйбәтерәк икәнен йәшәйеш тәжрибәһе менән танып белгәндәр икән өлкән ҡәрҙәштәрем.

Прополис атамаһы сығышы буйынса латин һәм грек терминдарына бәйле. ”Про” — ал, алғы, ”полис” — нығытма (крепость), ҡала тигәнде аңлата. Башҡорттар прополисты ҡорт елеме, ҡорт ыҫмалаһы, ти. Ул һәр умартасыға яҡшы билдәле. Ҡорттар ошо ыҫмала менән рамдарҙы шыумаҫлыҡ итеп нығыта, умарта ябыуын рамдарға йәбештерә, ярыҡтарҙы, тишек-тошоҡто бөтәштерә, кейәне тарайтып, көнитмештәренә яраҡлаштырып һылай, ”прополис балаҫы”нан үтеп йөрөй. Кейәне тарайтыу һалҡындан, дошмандарҙан һаҡланыу, инеүсығыу урынын тейешле контролдә тотоу өсөн дә кәрәк. Бал ҡорттары умарта эсенән сығарып ташлап булмаған бөжәктәрҙе, кеҫәрткеләрҙе, сысҡандарҙы ла прополис менән көпләп ҡуя, улар иһә боҙолмай, еҫләнмәй, серемәй. Шулай итеп, прополис һаҡланыу сараһы, нығытма һымаҡ, бал ҡорттарын, торлағын үтәләй өргән елдән, һалҡындан, дымлылыҡтан, күгәреүҙән һәм төрлө микробтарҙан һаҡлай. Прополис бактерияларҙы юҡ итеү ҡеүәһенә, көслө антисептик үҙенсәлектәргә эйә. Бәғзе ғалимдарҙың белдереүенсә, прополис ыҫмаланан, елемле матдәләрҙән, майҙарҙан, һеркәнән һәм балауыҙҙан тора.

Күренекле француз ғалимы Роми Шовэн белдереүенсә, башҡа бөжәктәрҙән айырмалы рәүештә бал ҡорттары теләһә ниндәй бактерияларҙан азат. Улар бик һирәк осраҡта ғына зарарлана. Ошо хикмәтле хәлде тикшереп, ғалимдар бал ҡорттарын бактерияларҙан һәм вирустарҙан ете антибиотик һаҡлай тигән һығымта яһай: бал, балауыҙ, инә ҡорт һөтө, прополис, ҡорт ағыуы, һитә, һеркә. Һәр умартала 50—60 мең бал ҡорто йәшәй, шуға ла һаҡланыу үтә лә мөһим. Бал ҡорттары шул тиклем күп тупланған ояла зарарлы ауырыу таралһа, күс тулыһынса ҡырылыр ине. Мәгәр ете антибиотик былдай аяныс хәлгә юл ҡуймай.

Ғалимдарҙың билдәләүенсә, бал ҡорттары ҡырҡ ике миллион йыл элек барлыҡҡа килгән. Шуныһы ҡыҙыҡ: һәр төр тереклек ҙур үҙгәреш кисерһә лә, ошондай оҙайлы осорҙа бал ҡорттары үҙгәрешһеҙ ҡалған. Шуға ла улар бөтә тереклек донъяһында айырым урын биләй һәм ғәжәп ҡылырлыҡ үҙенсәлектәргә эйә. Бал ҡорттарының эшен, үҙенсәлектәрен яҡындан өйрәнергә теләп, атаҡлы грек философы Аристотель үтә күренмәле умарта яһаған. Мәгәр бал ҡорттары стенаны эске яҡтан ҡуңғырт йәшел матдә менән ҡаплап ҡуйған. Әйткәндәй, Аристотель заманында прополис ”ағастарҙың күҙ йәше” (акация, ҡарама) тип йөрөтөлгән.

Бал ҡорттары прополисты ылыҫлы һәм япраҡлы ағастарҙың ҡабыҡтарынан, ылыҫтарынан, бөрөләренән һәм ыҫмалалы матдәләр бүлеп сығарған үҫемлектәрҙән йыя. Урманда урынлашҡан умарталыҡтарҙа, яландағы умарталыҡтарға ҡарағанда, прополис күберәк була. Бал килеме мәлендә бал ҡорттары ғәмәлдә һут ташыу менән мәшғүл. Прополис бал килеменән алда һәм унан һуң йыйыла. Прополисты бөтә күс түгел, бәғзе ҡорттар ғына йыя, тигән фекер ҙә бар. Умартала прополис миҡдары уның ҡайҙа урынлашыуына ла, ҡорттарҙың тоҡомона ла бәйле. Бал ҡорттарының ҡайһы бер тоҡомо прополисты күберәк, икенселәре аҙыраҡ, һәр умарта йөҙ—өс йөҙ грамм прополис йыя. Умартаның йышылған һәм шымартылған урындарында прополис аҙыраҡ, ҡытыршы урындарында күберәк. Ун биш градус температурала ул ҡаты торошта һәм ыуалыусан, бынан юғарыраҡ температурала, эҫелә йомшара, ҡулға һылашып тора. Ниндәй үҫемлектәрҙән йыйылыуына ҡарап, ҡорт

елеме һарғылт һоро, ҡуңғырт йәшел төҫтә булыуы ихтимал. Таҙа прополис таралып тормай, һағыҙ һымаҡ, балауыҙҙан тығыҙыраҡ, һыуҙа бата һәм иремәй, спиртта өлөшләтә, ә эфирҙа һәм хлороформда еңел ирей.

Ҡортсолоҡ ризыҡтары терекләккә бик тә кәрәк аҡһымға, аминокислоталарға, углеводтарға, ферменттарға, бәлзәмгә һәм айырыуса микроэлементтарға ифрат бай. Прополиста — алюминий, ванадий, тимер, кальций, кремний, марганец, стронций бар; инә ҡорт һөтөндә — алтын, көмөш, тимер, кальций, кобальт, кремний, магний, марганец, никель, хром, көкөрт, цинк; һеркәлә — барий, ванадий, вольфрам, тимер, алтын, иридий, кальций, кадмий, кобальт, кремний, магний, баҡыр, молибден, палладий, платина, көмөш, фосфор, хлор, хром, цинк, стронций, мышаяҡ, аҡ ҡурғаш; ҡорт ағыуында — тимер, йод, калий, кальций, магний, марганец, баҡыр, көкөрт, хлор, цинк; балда — алюминий, бор, йод, тимер, кремний, литий, магний, марганец, калий, кальций, натрий, баҡыр, никель, ҡурғаш, осмий, көкөрт, титан, фосфор, хлор, хром, цинк. Рәсәй һәм сит ил ғалимдарының белдереүенсә, был нигеҙле, раҫланған мәғлүмәт, ҡортсолоҡ ризыҡтары байтаҡ ауырыуҙарҙы булдырмауҙа һәм дауалауҙа, кешенең сәләмәтлеген нығытыуҙа баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә.

Ғалимдарҙың асыҡлауынса һәм аныҡлауынса кеше ҡанында егерме дүрт микроэлемент булһа, ҡортсолоҡ ниғмәттәрендә — егерме ике. Улар тәнгә ғәмәлдә аҙыҡ-түлек, ашһыу менән инә. Тәндә бөтә биохимик һәм физиологик хәл-күренештәр микроэлементтар ҡатнашлығында бара. Улар ҡан хасил итеүҙә, һөйәкте барлыҡҡа килтереүҙә, үрсеп-ишәйеүҙә, иммунобиологик тәьҫирҙәрҙә, организмда аҡһымдар синтезында, матдәләр һәм йылылыҡ алмашыныуында ҡатнаша. Микроэлементтар витаминдар, ферменттар һәм гормондар менән үҙ-ара бәйләнештә вә йоғонтола тора. Медицина ғилемендә билдәләнеүенсә, микроэлементтар тәндең төрлө ағзаларында туплана: баҡыр — бауырҙа, електә; кадмий, молибден — бөйөрҙә; литий — үпкәлә; йод — ҡалҡан биҙендә; цинк — енси биҙҙәрҙә, организмдың үҫешенә тәьҫир иткән эске секреция биҙе — гипофизда, ашҡаҙан аҫты биҙендә; хром, никель — гипофизда, стронций — һөйәктәрҙә... Ванадий, тимер, баҡыр, марганец, кобальт, никель, цинк кеүек микроэлементтарҙың етмәүе ҡан барлыҡҡа килеү барышын боҙа. Бал йәиһә инә ҡорт һөтө, манса (һитә), һеркә, прополис ҡулланыу аҙ ҡанлылыҡтан арындыра. Баҡыр, йод, кобальт лейкоциттарҙың әүҙемлеген, организмдың инфекция сирҙәренә ҡаршы тороусанлығын көсәйтә. Шулай итеп, витаминдарға һәм микроэлементтарға бай ҡортсолоҡ ризыҡтарын даими ҡулланыу анемиянан дауаланырға булышлыҡ итә, иммунобиологик ҡеүәтте арттыра, сәләмәт тормош сығанағы булып тора.

Прополистың дауалау үҙенсәлектәрен беҙҙең эраға тиклем бер нисә мең йыл элек үк Боронғо Мысырҙа мәжүсиҙәр, имселәр, фирғәүендәрҙең мәйеттәрен мумиялаштырыусылар яҡшы белгән. Изге бал ҡортоноң серле матдәһе тураһында белешмәләр грек, рим, ғәрәп философтарының һәм табиптарының хеҙмәттәрендә лә сағылып ҡалған. Грузин халыҡ медицинаһында, дауалау китаптарында ла ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр һаҡланған. Ауыҙ ҡыуышлығы, теш боҙолғанда прополис ҡулланғандар. Яңы тыуған баланың кендеген киҫкәс, унның йәймәһен һылағандар, бала-

лар уйынсыҡтарына иретмәһен һөрткәндәр. Ҡан төкөргәндә шундай им тәҡдим ителгән: "Булавка башы ҙурлығындағы прополис ал да өс көн рәттән иртән һәм кис өсәр бөртөк йот". Ревматизм булғанда, һыуыҡ тейгәндә, бәшмәк ауырыуҙарынан аяҡ боҙолғанда ауыртҡан урындарға, һытҡыға, шешектәргә йоҡа ғына прополис йәймәһе һалып, ғәҙәттә, төнгөлөккә урап, бәйләп ҡуйғандар. Ғөмүмән, әүәл-әүәлдән прополис антисептик һәм яраларҙы тиҙ уңалтыусы матдә иҫәпләнгән. Антибиотик үҙенсәлектәрен белеп, яу, һуғыш ваҡытында прополис төнәтмәһен һәм майын операциялар эшләгәндә, йәрәхәттәрҙе бөтәштереүҙә, тunion-ҡымаларҙы тергеҙеүҙә ҡулланғандар. Прополислы бәйләүес гангренанан ҡотҡарған. Киҫелгән, һуғылған, бешкән, эренләгән урындарҙы прополис һөртөп бәйләгәндәр, сөйәлдәрҙе, һытҡыларҙы бөтөргәндәр. Шуға ла прополистың хаҡы балдан да ҡиммәтерәк булған. Дауалау алымдары ил-йортта сер итеп тотолған, нәҫелдән-нәҫелгә бирелгән, халыҡ медицинаһында киңерәк ҡулланыш алған.

Тәбиғи сығышлы им-дауа сығанағы, йоғонтоло биологик үҙенсәлектәргә, микробтарға, шешеүгә ҡаршы, тән туҡымаһын, күҙәнәктәрен һәм организмды ҡайтанан тергеҙеү тылсымына эйә матдә булараҡ, прополис донъя медицинаһында, фармацевтика сәнәғәтендә төрлө дауалау препараттары етештереү өсөн ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Уның менән ғилми тикшеренеү институттары шөғөлләнә башлай, Румыния, Чехословакия, Югославия, Болгария, Дания, Польша, Англия кеүек илдәрҙең ғалимдары ҡатнашлығында прополистың үҙенсәлектәре, химик составы, төрлө биологик процестарға йоғонтоһо, уны медицинала ҡулланыу, прополис препараттары буйынса халыҡ-ара симпозиумдар ойоштороla. Прополистың төрлө концентрацияла һыуҙағы, спирттағы һығымсаһы һәм иретмәһе, үҫемлектәр, мал-тыуар майында эшләнгән майы, сәйнәү һағыҙҙары, эмульсияһы, ингаляцияһы, косметикаһы, йәбештермәһе, биологик бәйләүесе, пастаһы хәҙер медицинала киң ҡулланыла.

Бөтә Рәсәй Горький бешеү үҙәгендә тәне нығ бешкән ауырыуҙарҙы дауалауҙа, бик ауыр йәрәхәттәрҙе ҡыҫҡа ваҡытта уңалтыуҙа ун биш процентлы прополис майы файҙаланыла. Ул үҫемлек, мал майында, йәиһә аҡ майҙа әҙерләнә. Ҡайнау торошона еткерелгән, мәгәр ҡайнамаған майға ваҡланған таҙа прополис (100 грамм майға 15 грамм прополис) ҡушыла һәм ирегәнсе балғалаҡ менән болғап торола, шунан марля аша һөҙөлә. Бер нисә ҡат марляға буялған прополис майы бешкән урынға һалынып, бер-ике тәүлеккә бәйләп ҡуйыла. Бәйләүес яраға йәбешмәй һәм уны алғанда тән туҡымаһын боҙмай, ауырттырмай.

Горький ғилми-тикшеренеү тиревенерологик институтында эренләткес трихофития, сәс ҡойолоу, пеләшләнеү, пиодермия, тире туберкулезы, сөсө (волчанка), зарарлы бәшмәк ауырыуҙарын прополис менән дауалайҙар. Баштың сәсле өлөшөндә трихофитияны дауалауҙа илле процентлы прополис майы ыңғай һөҙөмтәләр биргән. Клиник тәжрибәләр күрһәтеүенсә, сираҡтағы хроник язваны егерме—утыҙ процентлы прополис һығымсаһы менән бәйләгәндә тиресәлә яңы күҙәнәктәр, тоташтырғыс туҡымалар йәһәтерәк барлыҡҡа килгән.

Сит илдәрҙә, мәҫәлән, Чехословакияла прополис хирургияла ауыр һәм оҙаҡ уңалған яраларҙы имләүҙә уңышлы ҡулланыла. Ун—утыҙ

процентлы прополис майы йәрәхәттәрҙең һыҙлауын кәметә, ит үреүен тиҙләтә, тән туҡымаһын тергеҙә һәм ҡәҙимге препараттар менән сағыштырғанда, дауалау ваҡытын ике тапҡырға кәметә, бактериялар менән зарарланған яраларҙы ла күпкә тиҙерәк уңалта. Бала сағында улымдың беләге боҙолоп, сей яраға әйләнгәйне. Эренле яраға прополис майы буяп, марля менән бәйләп ҡуйҙым. Ике көндән һуң бәйләүесте сисһәм, йәрәхәттең эҙе лә ҡалмаған.

Псориаздан ыҙалаған сирлеләргә башланғыс стадияла ике-өс ай буйы составында прополис булған таблеткалар бирәләр. Дауалау ваҡытында ҡанда липидтар кимәле кәмей. Күптәр һауыға, башҡаларҙың хәле һиҙелерлек яҡшыра.

Медицинала билдәле булыуынса, күп күләмдә анбиотиктар ҡабул итеү кеше организмына кәрәкмәгән йоғонто ла яһай. Шуға ла үпкә туберкулезы, пневмония, бронхит кеүек сирҙәрҙе прополис майы, һығымсаһы, уның спирттағы төнәтмәһе менән имләү хәйерле. Үпкә туберкулезының аҙған формаларын дауалауҙа ла прополис файҙалы. Сирҙең ныҡлығына, ауырлығына бәйле, дауалау дүрт айҙан ун айға тиклем һәм унан да оҙағыраҡ дауам итеүе мөмкин. Прополис препараттары һәм бактерияларға ҡаршы препараттар менән комплекслы дауалау тәжрибәһе лә бар. Ун биш процентлы прополис майын йәиһә спирттағы егерме процентлы төнәтмәһен ауырыуҙарға көнөнә өс тапҡыр туҡланырҙан бер сәғәт алда бирәләр. Һөҙөмтәлә температура, РОЭ төшә, йүткереү, ҡаҡырыҡ бүленеү, күкрәктә ауыртыу, ҡан төкөрөү туҡтай, дөйөм хәл яҡшыра, аппетит тыуа, йоҡо нормалләшә.

Туберкулезды һәм үпкә шештәрен дауалауҙа Башҡортостандағы "Прополис" йәмғиәте түбәндәге дауалау курсын тәҡдим итә: "Аҡ майҙағы ун—утыҙ процентлы прополис майын ашағанға хәтле бер сәғәт, бер сәғәт ярым алда көнөнә ике-өс мәртәбә йылы һөт менән бер балғалаҡ ҡабул итергә. Туберкулезды тулы дауалау курсы — алты ай самаһы. Һәр курстан һуң туҡталып тороу ваҡыты — ике-өс аҙна. Дауалауҙың беренсе курсында — ун процентлы, икенсе курсында — ун биш, өсөнсө курсында — егерме, дүртенсе курсында — егерме биш, бишенсе курсында — утыҙ процентлы прополис майы ҡулланыла".

Заманында миңә апайымдың игеҙәктәрен прополис менән һауыҡтырырға тура килде. Улар бала тыуыу йортонан сығып өлгөрмәç элек үк үпкә шеше менән ауырый башланы. Район табиптары игеҙәктәрҙе йыл буйы тиерлек дауаланы. Мәгәр хәлдәре ваҡыты-ваҡыты менән генә яҡшырҙы һәм тағы насарайҙы. Балалар ҙа, апай үҙе лә ныҡ ыҙаланы. Шул саҡ мин ҡорт елемен файҙаланып ҡарарға кәрәк, тигән фекергә килдем. Спиртта ун процентлы прополис иретмәһен әҙерләнем. Ярты балғалаҡ самаһы иретмәне ирелгән аҡ майға ҡушып, балаларға бирә башланыҡ. Алтыете көндән игеҙәктәрҙең хәле күҙгә күренеп яҡшырҙы, ә дүрт-биш аҙна үтеүгә улар тамам һауыҡты: йүткереүҙәре бөттө, температуралары төштө, ауырлыҡтары артты. Инде улар — сәләмәт, бик тә эшһөйәр ир-егеттәр.

Акушерҙың иғтибарһыҙлығы, вайымһыҙлығы арҡаһында бактерия эләгеп, ике яҡлы пневмония булып, улым бәпес кенә көйө Өфөнөң 17-се дауаханаһында интегеп ятты. Туҡтауһыҙ укол да ҡаҙанылар, плазма ла ҡуйҙылар, ҡан да ҡойҙолар... Мәгәр ай ярым буйына хәле ауыр, тигән хәбәр генә ишет-

тек. Ниһайәт, медицина фәндәре докторы артабан дауаханала ятыуҙың файҙаһыҙ икәнен әйткәс, баланы ауылға алып ҡайттыҡ. Йәнә прополистың тылсымы, илаһи дауаһы килеште. Шул ваҡыттан бирле уның башҡаса пневмония менән ауырығаны юҡ, инде ул үҙе ике бала атаһы.

Хәҙер үпкә туберкулезы, пневмония, бронхит, эндобронхит, лимфатик төйөрҙәрҙең, бөйөрҙөң шешеүе менән ауырыусыларҙы дауалауҙа прополистың әһәмиәтен табиптар ҙа таный. Шешеүгә ҡаршы, анестетик, йәнә гормональ һәм иммунитет һаҡлағыс эффектка эйә прополис тын юлы ауырыуҙарынан, бронх астмаһынан арыныуға ыңғай йоғонто яһай, сирҙең йыш киҫкенләшеүенә юл ҡуймай, организмдың ҡөҙрәтен арттыра. Ете-һигеҙ йәшлек ҡыҙ бала бронх астмаһынан, тын бөтөү өйәнәктәренән ыҙалай ине. Төрлө дарыуҙарҙың, дауаханала ятыуҙың файҙаһы теймәгәс, беҙ уға тәнәфес яһай-яһай йыл буйына прополис майы һәм өс-биш грамм прополисты һағыҙ итеп сәйнәргә бирҙек. Бронх астмаһы бөттө, ҡыҙ бала йүгерә, саңғыла йөрөй башланы. Тамаҡ, аңҡау шешеүе менән билдәләнгән ангинаның теләһә ниндәй стадияһында ла иң тәьҫирле сара — ҡорт һағыҙы. Ашағандан һуң ике борсаҡ ҙурлығындай прополисты таралғансы яй ғына сәйнәргә, төнгөләккә тешкә һылаштырып ҡуйырға кәрәк. Мәгәр яҡшы сифатлы прополис ҡына ыңғай һөҙөмтә биреүен оноторға ярамай. Тын юлдарын дауалағанда прополис иретмәһе менән ингаляция ла яһайҙар.

Дизбактериоз эҙемтәһендә ауыҙ ҡыуышлығында, аңҡауҙа, телдә, яңаҡтарҙа монилиаз хасил булып, кеше аҙыҡ ҡаба алмай, ауыҙҙан, танауҙан һыулы һәм ҡанлы бүлендектәр бүленә. Айырыуса бәпестәр, бала-сағалар ныҡ ыҙалай. Бәпестәр тиҙ ярһый, имә алмай, илай. Прополистың спирттағы утыҙ процентлы төнәтмәһенә һыу һәм бал ҡушып, имгәнгә тиклем ярты сәғәт элек көнөнә өс тапҡыр өс-биш көн ҡаптыралар. Бәпестәр тыныслана, имә, һәйбәт йоҡлай.

Йотҡолоҡ тиресәһе шешкәндә, йәғни хроник фарингит ыҙалатҡанда утыҙ процентлы прополис төнәтмәһенә глицерин, йәиһә персик майы ҡушып ун-ун биш көн ауыҙ, танау ҡыуышлығына һөртәләр. Тештәр, теш ите боҙолоуҙан, насар еҫ аңҡымаһын өсөн ауыҙ ҡыуышлығын прополис шыйыҡсаһы аэрозоле менән дә һуғаралар. Тымау тейгәндә һыу ҡушылған спиртлы прополис төнәтмәһен мамыҡ тампонына һеңдереп, танау тишектәренә тығалар.

Ғөмүмән, ауыҙ ҡыуышлығы боҙолоу һәм шешеү ныҡ таралған сир. Ҡәҙимге медикаменттар һәм препараттар йыш ҡына теләгән терапевтик һөҙөмтәләр бирмәй. Был осраҡта прополистың эфир-спирт ҡушылдығы яҡшы. Пародонтоз, стоматит, теш һурғандан һуң альвеолит шештәрен дауалағанда прополис препараттары иң йоғонтоло сара.

Урта ҡолаҡ шешкәндә, эренләп һыҙлағанда, насар ишеткәндә прополистың етмеш градуслы спирттағы утыҙ процентлы иретмәһен марля тампонына һеңдереп, ҡолаҡ пәрҙәһенә ҡуялар, йәиһә ҡыуышлыҡты төнәтмә менән ун—ун биш көн йыуҙырталар. Аптекаларҙа Таллинда әҙерләнгән прополислы махсус ҡолаҡ тампондары һатыла. Ике—биш процентлы прополислы офтальмик иретмә, биш—ун процентлы прополис майы күҙ йәрәтләнгәндә һәм янғанда, күҙ алмаһының алғы полюсы вирустар һәм микробтар эләгеп шешкәндә ныҡ килешә.

Хроник гастрит, ашҡаҙанда һәм бөйән эсәгендә сей яра (язва) булғанда, ярты балғалаҡ прополис

төнәтмәһенә ҡайнаған һөт, йәиһә һыу ҡушып, көнөнә өс тапҡыр ун һигеҙ—егерме көн эсәләр. Хроник колит (йыуан эсәк тиресәһе шешеү), хроник простатит менән интеккәндәргә лә прополис яҡшы им. Ашҡа ҡушып бирелгән саф прополис иһә һейҙек ҡыуыҡтарының эшмәкәрлеген нормалләштерә. Проктологияла спирттағы ун процентлы прополис экстраты, йә иһә майы һеңдерелгән свечалар арт юл, тура эсәк йәрәхәттәрен, геморройҙы уңалта.

Ҡатын-ҡыҙ енесе ағзалары еңсә (влагалище), инәлек муйынтығы (шейка матки) патоген бактерияларҙан, инфекцияларҙан, трихомониаздан шешкәндә, эррозия күҙәтелгәндә прополистың спирттағы өс процентлы иретмәһе, һығымса буялған махсус свечалар ете—ун көн эсендә шешеү процесын бөтөрә. Гинекологияла операциянан һуң прополис экстратын, майын һөртөп ябыу йәрәхәттәрҙе тиҙ уңалта. Ғәҙәттә ун-ун биш тампон ҡулланыла. Климатерик синдром осоронда гинекологтарҙың һынауынса, ун процентлы прополис майын һөртөү еңсәнең ҡуҙғыған тиресәһе күҙәнәктәренә, гениталь атрофияның бөтә формаларына тынысландырғыс йоғонто яһай. Спиртлы прополис төнәтмәһе стрептококктарҙы, стафилококктарҙы юҡ итеү ҡеүәһенә лә эйә.

Һуңғы йылдарҙа прополистың тылсымлы тәьҫире, төрлө сирҙәрҙе дауалау тәжрибәһе тураһында байтаҡ ғилми хеҙмәттәр яҙылды. Эффектлы дауалау сараһы булараҡ, ул медицина өлкәһенә киңерәк һәм тәрәнерәк үтеп инә. Хәҙер сит илдәрҙә лә, Рәсәйҙә лә прополис нигеҙендә байтаҡ апитерапевтик медикаменттар, препараттар, анығыраҡ итеп әйткәндә, төнәтмәләр, майҙар, кремдар, таблеткалар, һығынтылар, эмульсиялар, сироптар, тампондар, свечалар, теш пасталары, биологик актив өҫтәлмәләр, брикеттар әҙерләнә һәм магазиндарҙа, аптекаларҙа һатыла. Прополистың спиртлы төнәтмәһе Мәскәүҙә, Киевта, Ҡазанда, Пермдә, Өфөлә етештерелә. Баш ҡалабыҙҙағы аптекаларҙа ғәмәлдә сит яҡтарҙан килтерелгән прополис шыйыҡсаһын тәҡдим итәләр. Сөнки ”Иммунопрепарат” ”Микроген” фәнни-производство берекмәһенең федераль дәүләт унитар предприятиеһы филиалына әйләнгәс, спиртлы прополис төнәтмәһен етештереүҙе ныҡ кәметте, әүәл 120 мең флакон төнәтмә әҙерләнһә, 2005 йылда 10 мең флакон ғына әҙерләнде.

Өфөләге ”Прополис” йәмғиәте ҡортсолоҡ ниғмәттәрен эшкәртеп, прополис майы, прополис, бал, һеркә, эликсирҙар, лосьондар, кремдар етештерә һәм баш ҡалабыҙҙағы ”Сәләмәтлек оазисы” магазиндарында һата, 1994 йылдан бирле айына бер мәртәбә ”Прополис” гәзитен нәшер итә. Был баҫма һаулыҡ, оҙон ғүмерлек, гүзәллек серҙәрен аса, ҡортсолоҡ ризыҡтарын медицинала, диетологияла, косметологияла ҡулланыу тураһында ҡыҙыҡлы белешмәләр, мәғлүмәттәр бирә. Тәбиғи прополис мөғжизәле, тылсымлы сәләмәтлек сығанағы икәненә инанаһың.

Прополисты ҡулланыу даирәһе киң. Уны ветеринарияла файҙаланалар. Борон байтаҡ илдәрҙә прополистың спирттағы шыйыҡсаһы лак булараҡ юғары баһаланған. Прополис скрипкалар өсөн лак әҙерләүҙә лә ҡулланылған. Бөтә донъяға билдәле Страдивариус тарафынан яһалған данлы скрипкалар бал ҡорттары йыйған прополис арҡаһында үҙенә башҡа илаһи сифаттарға эйә, тигән фараз да бар. Был, һис шикһеҙ, бал ҡорто, был донъяға әҙәм нәҫеленән илле—алтмыш мең йыл әүәл барлыҡҡа килгән бал ҡорто мөғжизәһе!